# Бармаҡ уйындары

**Аннотация**

Тәғдим телгән мастер-класста, башҡорт телен өйрәтеүҙә бармаҡ уйындарының роле күрһәтелгән. был мастер-класс педагогтарҙы, ата-әсәләрҙе башҡорт телендә бармаҡ уйындары менән таныштыра.
Мастер-класстың төп маҡсаты: педагогтарҙы башҡорт телен өйрәтеүҙә бармаҡ уйындарының әһәмиәтен күрһәтеү.

**Аңлатма яҙыу**

«Баланың баш мейеһе бармаҡ осонда урынлашҡан» - тип юҡҡа ғына әйтмәй педагог Сухомлинский. Балаға донъяны танып белеүҙә ҡул суҡтары ярҙам итә, ул һыуыҡты – йылынан, ҡатыны – йомшаҡтан, еңелде – ауырҙан, шулай уҡ предметтарҙың формаһын, күләмен айырырға өйрәнә. ҡул суҡтары туранан тура баш мейеһе менән бәйләнгән. бармаҡ уйындары баланың иғтибарлығын, күҙәтеүсәнлеген, хәтерен, тапҡырлығын, күреү, ишетеү ағзаларының камиллаштыра, шулай уҡ башҡорт телен өйнрәтеүҙә, өйрәнелгән һүҙҙәрҙе нығытыуҙа ярҙам итә.
Хәҙерге заманда балалар өсөн төрлө сағыу йәнһүрәттәр, тапшырыуҙар, китаптар, уйынсыҡтарҙың иҫәбе-һаны юҡ. Әммә баланың үҫешенә ыңғай йоғонто яһаусы элек-электән килгән уйындар, ысулдар ҙа үҙ ҡиммәтен юғалтмай. Мәҫәлән, бармаҡ уйындары. Балаларҙың ҡул суҡтарын һәм бармаҡтарын хәрәкәтләндерергә, етеҙлекте арттырырға өйрәтеүҙә бармаҡ уйындары ҙур урын алып тора. Бармаҡ уйындары баланың ҡул мускулдарын нығытыуға, иғтибарын, хәтерен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереүгә булышлыҡ итеү менән бер рәттән телмәр үҫешенә лә ҙур йоғонто яһай.
Ҡул моторикаһы үҫешмәгән балалар ҡалаҡ йә ҡәләмде насар тота, аяҡ кейемендәге бауҙы бәйләй алмай, өҫ кейемендәге төймәләрҙе элә алмай ыҙалай. Уларға конструкторҙарҙың деталдәрен йыйыу, пазлдар, иҫәп-хисап таяҡсалары, мозаика менән эшләү ҙә ҡыйынға тура килә. Ғәҙәттә, бындай балалар пластилин менән әүәләү, аппликация яһау кеүек шөғөлдәрҙе лә яратмай. Һөҙөмтәлә, уларҙың аң кимәле артта ҡала бара. Ғөмүмән, был баланың донъяны танып белеүе лә етерлек кимәлдә үҫешмәй. Ҡул моторикаһының үҫешмәүе сабыйҙарҙың күңел торошона, үҙ-үҙен баһалауына ла йоғонто яһамай ҡалмай.
Шулай уҡ донъяны танып белеүҙә иҫ киткес тәрбиә сығанағы булып тора. Сөнки уйындар аша бала этик ҡағиҙәләр менән дә таныша башлай.

Бишек йырҙары баланы тынысландырыу өсөн ҡулланылһа, бармаҡ уйындары, киреһенсә, баланың күңелен күтәреү, кәйефен яҡшыртыу, көлдөрөү сараһы булып тора.

Бармаҡ уйындары аша, бала ишеткән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен тиҙерәк аңлай башлай, танып белеү һәләтен үҫтереүгә лә ярҙам итә. Ундай уйындар баланың баш мейеһен тиҙерәк эшләтә һәм ҡул моторикаһын үҫтерә.

Бармаҡ уйындары балаларға башҡорт телен тиҙ үҙләштерергә ярҙам итә. Бармаҡ уйынын уйнағанда балалар үҙҙәрелә һиҙмәҫтән башҡорт телен тиҙерәк өйрәнә. Бармаҡ уйындары бик мауыҡтырғыс һәм хис-тойғоло уйындар. Ул әйләнә тирәләге ысынбарлыҡты, әйберҙәрҙе, йәнлектәрҙе, кешеләрҙе, тәбиғәт күренештәрен сағылдыра.

Бармаҡ уйындары аша, балалар халыҡ- тел ижады, менән таныша һәм башҡорт телен тиҙерәк үҙләштерә.

Беҙҙең балалар баҡсаһында, бармаҡ уйындарына ихтибар кескәй төркөмдҙә уҡ башлана һәм ошо эш мэктәпкә әҙерлек төркөменә тиклем дауам итә. Бармаҡ уйындарын ҡулланыу минҙә балаларҙың телмәрҙәрен, аң-зиһен үҫтерергә ярҙам итә.

Шулай уҡ миндә хайуандар, ҡоштар, үҫемлектәр, ғаилә, йыл-миҙгелдәренә, һауа торошона ярашлы бармаҡ уйындары тупланған йыйылмалар бар. Беҙ бармаҡ уйыны ярҙамында йомаҡтар сисәбеҙ, тиҙәйткестәр, мәҡәлдәр, тел – шымартҡыстар өйрәнәбеҙ.

Тел өйрәнеүсе балалар театрлаштырылған бармаҡ уйындарын бик ныҡ яраталар. Бармаҡ уйындары менән театрлаштырыуҙы бергә бәйләү отошло тип уйлайым. Балалар менән берлектә, уларға таныш әкиәт "Йомро икмәк" те бармаҡ уйындары аша театрлаштырабыҙ.

**Әйҙәгеҙ мин һеҙгә әкиәт героин ҡулланып бармаҡ уйынын уйнатып күрһәтәм.**

Тәгәрәп -тәгәрәп йомро икмәк ҡуянға осрай.

**Ҡуян:**
- Мин ҡуян ап-аҡ ҡуян
Урман эсендә оям
Тиҙерәк тотоп һине
Минҙә ашарға ине.

**Йомро икмәк әйтә:**
- Ҡүйсы ҡуян ашам

Сығам йырлап ҡаршы
Әбейҙәндә ҡастым мин
Бабаҙанда ҡастым мин
Һинәндә ҡасып китәм.

**Бармаҡ уйындары беҙгә һандарҙы ла өйрәнергә ярҙам итә.**

Биш бармағым уң ҡулда,
Биш бармағым һул ҡулда.
Бармаҡтарым ярҙам итер
Һанды оторға шунда.

Уң ҡулда ла биш бармаҡ,
Һул ҡулда ла биш бармаҡ.
Ике ҡулды бергә ҡуйһаң,
Булыр һиңә ун бармаҡ.

**ғаилә ағзаларында бармаҡ уйындары аша өйрәнәбеҙ.**

Был бармаҡ олатай

Был бармаҡ өләсәй

Был бармағым атайым

Был бармағым әсәйем

Был бармағым бәләкәй, исеме уның бәпәй.

**Бармаҡтар талғанда**

Беҙ яҙҙыҡ, яҙҙыҡ, яҙҙыҡ, (һәр бер ижеккә бармаҡтарҙы яҙып-бөгөү)

Бармаҡтарҙы талдырҙыҡ.

Хәҙер беҙ ял алабыҙ (ҡул суҡтарын һелкетеү)

Һәм тағы ла яҙабыҙ.

Килде лә болот

Күк йөҙө тулып, (устар менән болоттарҙы һүрәтләргә)

Ергә һибелде

Тамсылар булып

Тып-тып-тып…(бармаҡтарҙы өҫтәлдә йүгертергә)

Һаумы, алтын ҡояшым (ҡулдар менән түңәрәк яһау
Һаумы, зәп-зәңгәр күгем (ҡулдарҙы болғау)

Иҫәнме һин, елкәйем, - (биткә ел елпеү)

Бармаҡ уйындары ҡыҙыҡлы, аңлайышлы, текстары еңел булырға, баланың үҫеш кимәленә тап килергә тейеш. Уйындарҙы өйрәткәндә һәр бер хәрәкәтте теүәл итеп башҡарып күрһәтергә, һүҙҙәрен еренә еткереп өйрәтергә кәрәк. Бармаҡ уйындарын төрлө образдарға инеп башҡарыу балаларҙа ҡәнәғәтләнеү хисе уята, матурлыҡты, тирә-йүнде, ысынбарлыҡты аңларға ярҙам итә. Ошо уйындар барышында оялсан, үҙ эсенә бикләнгән балалар ҙа асылып китә. Бала үҙ көсөнә ышана, үҙ эшенә баһа бирергә өйрәнә. Уйын ваҡытында баланың күңеле күтәрелә, нервы системаларының эшмәкәрлеге яҡшыра.
Бармаҡ уйындарын бер нисә вариантта һәм бер нисә тапҡыр башҡарырға мөмкин. Сөнки таныш хәрәкәттәрҙе, һүҙҙәрҙе балалар бик яратып, ҡыҙығып башҡарала.
**Шулай итеп** бармаҡ уйынын ҡулланыу, балаларҙың телмәрен үҫтерә, башҡорт телен үҙләштерегә ярҙам итә һәм телгә ҡыҙыҡһыныу уята. Күрәһең, был уйындарҙың мөһимлеген элек-электән белгәндәр. Сөнки был уйындар башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадында киң ҡулланылған. Бөгөнгө көндә уларҙы дауам итеп балаларға өйрәтеү беҙҙең бурысыбыҙ тип уйлайым.

1. Азнабаева Ф.Г., Фаизова М.И., Агзамова З.А. Академия детства: Региональная программа для дошкольных образовательных организаций Республики Башкортостан. – Уфа: Издательство ИРО РБ, 2016г.
2. Гасанова Л.И., Гасанова Р.Х. Словесное творчество дошкольников на основе национальной культуры башкирского народа: Методическое пособие. – Уфа: Издательство ИРО РБ, 2016г.
3. Гасанова Р.Х. Традиции башкирского народа в воспитании дошкольников: методические рекомендации для воспитателей дошкольных образовательных организаций. – Уфа: Издательство ИРО РБ, 2017Г.
4. Дидактические игры «Я познаю Башкортостан»: Учебное пособие для воспитателей детских садов и учителей начальных классов. – Уфа: БИРО, 2005г.
5. Фольклорная педагогика в воспитании дошкольников: Методические рекомендации в помощь воспитателям образовательных учреждений. – Уфа: БИРО, 2004г.
6. Учебная хрестоматия «Я познаю Башкортостан» воспитателям дошкольных образовательных учреждений, учителям начальных классов и родителям для ознакомления детей с родным краем. Уфа, 2006г.
7. Гасанова Л.Н., Гасанова Р.Х. Словесное творчество дошкольников на основе национальной культуры башкирского народа: Методическое пособие – Уфа: Издательство ИРО РБ, 2016г.
8. Поликультурное образование дошкольник5ов в условиях реализации требований ФГОС ДО и Профессионального стандарта педагога: Рабочая тетрадь. – Уфа: Издательство ИРО РБ, 2017г.
9. Путь к школе. Речевое развитие детей 5,5-6 лет: Программа – руководство. Уфа: Издательство БИРО, 2009Г.